# Санды уҙәк

/Саңлы уҙәк/

"Саңдыуҙәк" көйөнөң сығышы Туйыш ауылынан. Туйыш ауылының байы Мөхәммәт Калдаманов үҙе Саңды уҙәк тигән урында йәйләүҙә йөрөгәндә Кинйәбай тигән ярлы курайсынан был көйҙө үҙ исеменә сығарткан. Был инде 1919 йылдарҙа, һуңғы йәйләүҙәр вакытында, була.

Саңлы уҙәк хәҙер Шайморатов исемендәге колхозға караған ер.

"Саңдуҙәк"тең куп варианттары булырға тейеш. Сөнки ул байҙар йыры ғына түгел. Ярлы Кинйәбай үҙенең хәсрәте, һөйгән кыҙы һәм үҙенең көсө тураһында ла йырлай. "Саңдуҙәк" байҙарҙың кымыҙ эсеп, кәйеф асып ултырыу йыры булыуҙан элек, хеҙмәт йыры ул. Унда хеҙмәт кешеһенең көсө, куңел киңлеге бар; шуға курә лә халкта куберәк шул хактағы вариант йырлана:

Саңдуҙәктә бесән сапканымдан  
Сеңгел-сәңгел сыға ла тауышым.  
Әй, сеңгел-сәңгел сыға тауышым.  
Шуға сәңгел сыға әй тауышым-  
Иән-тәндәрем иҫән дә һау өсөн,  
Әй йән-тәндәрем иҫән һау өсөн.

Икенсе, дуртенсе юлдар һәр сак шулай кабатланып киләләр.

Кинйәбай курайсы үҙенең һөйөп йөрөгән кыҙы тураһында ла йырлай:

Уң бармаҡкайҙарың ник ҡыҙарған,
Таш елэге әллә тирҙеңме?
Ә, таш елэге әллә тирҙеңме?
Аппаҡ йөҙгөнәйең һары булған,
Таштан да ҡаты хәсрәт күрҙеңме,
Әй таштан ҡаты хәсрәт күрҙеңме?

"Сандуғәк" тең йырҙары Байым ауыл Советенә ҡараған Туйыш ауылындағы колхозсы Хәмит Нәсибуллиндән һәм Иәнекәй ауылында йәшәгән Малбай Дауытов карттан яҙып алынды.

11,12 ауғыс,1952.

1.

Сандуғәктән бесән сапканымдан
Сенгел-сәнгел сыға тауышым;
Шуға сәнгел сыға эй тауышым,
Иән-тәндәрем исән-һау өсән.

Сандуғәкәй һинең тауың бейек,
Күренеп ята һинән күп ерҙәр;
Сандуғәкәй һинең тымыҙынан
Кәҙер-хөрмәт күрҙе күп ирҙәр.

Сандуғәкәй һинең исемең һәйбәт,
Өйөр-өйөр колон бәйҙәйбеҙ;
Сандуғәкәй һинең исемең һәйбәт,
Йылдың-йылы һиндә йәйҙәйбеҙ.

Аппак кына аппак ак уканы
Һуҙып ук һалдым Саңдуҫәк буйына;
Ак тирмәләр короп,колон бәйҙәп,
Утырһаң ине ғүмер буйына.

Елбер ҙә генә өргән ел кайҙа;
Елп-елп кенә итеп үҫкән буй кайҙа?
Үҙе лә замандашың булмаһа,
Кәҙереңде белгән ир кайҙа?

П.

Сандуҫәкәй,һинең йәмең була
Малым менән күсеп мин килһәм;
Саңдуҫәкәй,һиңә йыр сығарам,
Дәртте лә ирҙәр йырҙар мин үлһәм.

Атам-инәм миңә исем дә бирҙе
Яратып та һөйөп Ғосман тип;
Атам-инәм миңә әйтеп китте
Тиң-тоштарың булыр дошман тип.

Уң бармакайҙарың ник кыҙарған,
Таш еләге әллә тирҙеңме?
Аппак йөҙгөнәйең һары булған
Таштан каты хәсрәт күрҙеңме?